КИЛЕШЕЛГӘН
БР Учалы районы МР МҠУ
мәҙәниәт бүлеге етәксеһе
_________________Л.С. Сафиуллина
«____»__________________ 2023 й.

# ҠАҒИҘӘ

## Уйын-конкурс «Мәңге йәшәһен туған телем – башҡорт теле!»

**I. Ойоштороусылар:**

- Учалы районының “Ағинәй” йәмәғәт ойошмаһы һәм Өргөн ауылының “Ағинәй” йәмәғәт ойошмаһы;
- Учалы районы мәҙәниәт бүлеге, Өргөн ауыл мәҙәниәт йорто, Килмәк ауыл мәҙәниәт йорто;
- Учалы районы башҡорттары ҡоролтайы;
- Учалы районының Учалы ауыл биләмәһе хакимиәте, Миндәк ауыл биләмәһе хакимиәте.

**II. Сараның маҡсаты һәм бурыстары:**

- Сара Халыҡ-ара туған телдәр көнөнә арнап үткәрелә;
- туған телебеҙгә һөйөү тойғолары тәрбиәләү, уны тәрәнерәк өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, туған телдә аралашыу теләге уятыу, телмәрҙе үҫтереү һәм байытыу;
- туған телгә һөйөү менән бергә илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү.

**III. Сараны үткәреү шарттары һәм тәртибе:**

- Сара 2023 йылдың 20 февралендә, сәғәт 11-ҙә Өргөн ауылының мәҙәниәт йортонда һәм 28 февралдә, сәғәт 11-ҙә Килмәк ауылы мәҙәниәт йортонда үтә;
- сараға һәр ауылдан ике ағинәй һәм ике 10-12 йәшлек бала саҡырыла. Ҡатнашыусылар өсөн мотлаҡ шарт: мәҡәлдәр өйрәнергә, йомаҡтар һәм һанашмаҡтар ятларға, беҙҙең яҡта үҫкән үлән-сәскәләрҙең, ағастарҙың, ҡоштарҙың башҡортса атамаларын белеп килергә;
- сарала ҡатнашыусы балалар төрлө номинацияларҙа баһаланасаҡ һәм бүләкләнәсәк.

**IV. Сараның программаһы:**

1. Сәләмләү һәм үҙең менән таныштырыу.
2. “Мәҡәлдең яртыһын тап”.
3. “Һин миңә - мин һиңә” - йомаҡ ҡойошоу.
4. “Кем алыҫҡараҡ атыр?” – үләндәрҙең, ағастарҙың башҡортса атамаһын әйтеп ярышыу.
5. Бирелгән һорауға тулы йөкмәткеле яуап биреү (бәйләнешле һөйләү телмәрен үҫтереү).
6. “Бер тигәс тә ни яҡшы?” - тел биҫтәләре ярышы.
7. “Көн менән төн”, “Йылым”, “ Аҡ, ҡара” һүҙен әйтмәҫкә - уйындар.
8. Сарала ҡатнашыусыларҙы баһалау.
9. “Эш бөткәс, һыйланырға ярай” - сәй табыны.

Өҫтәмә мәғлүмәттәр алыу өсөн түбәндәге адрес һәм телефон буйынса мөрәжәғәт итергә: Учалы ҡалаһы, Төҙөүселәр урамы, 9, тел. 6-21-56

**Ғариза**

| | |
|---|---|
| Етәксенең исем-шәрифе | |
| Ҡатнашыусының исем-шәрифе | |
| Ҡатнашыусының исем-шәрифе | |
| Ҡатнашыусының исем-шәрифе | |
| Адрес | |
| Телефон һәм электрон адрес | |